# 1937

## / Поэма /

Алла ла, батша ла, батыр ҙа -
Азат итмәҫ бер кем беҙҙе.
Бары үҙ кулдарыбыҙ менән
Яуларбыҙ үҙ иркебеҙҙе.
"Интернационал".

### I

Мең туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл!..
Мең туғыҙ йөҙ утыҙ етелә
Мең туғыҙ йөҙ ун Етене ҙурлап,
Илем минең изге ителә.
Мең туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл!..
Мең туғыҙ йөҙ утыҙ етелә,
Мең туғыҙ йөҙ Ун Етене хурлап
Илем минең етем ителә.

Мең туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл!
Әйт дөрөҫөн, заман үтенә:
Мең туғыҙ йөҙ утыҙ ете һуйыл
Мираҫ инеме Ун Етенән?..

Әкиәттәге серле курай һымак,
Әйт, был ниндәй канлы тантана?
Бер осондан һинең балың тамһа,
Бер осондан ниңә кан тама?..

П

Бер карaһаң, утыҙ етелә
Котоптарға осоп етелә;
Бер карaһаң, утыҙ етелә
Коштар осоп етмәҫ ерҙәргә,
Баштар кайтып етмәҫ гүрҙәргә
Аҫыл ирҙәр алып кителә...
Бер карaһаң, утыҙ етелә
Оло байрам, һабан туйындай;
Бер карaһаң, утыҙ етелә,
Урман йыккан кара койондай,
Аҙмы акыл харап ителә,
Күпме күңел нахак кителә!..
Бер карaһаң, утыҙ етелә
Бетә илем сәскә аткандай,
Хер емештәр өҙөп капкандай;
Бер карaһаң, утыҙ етелә
Аяҙ көндә йәшен аткандай,
Аҙмы ейҙән мәйет сыккандай...
Бер карaһаң, утыҙ етелә
"Тымык Дон"дар ижад ителә;
Бер карaһаң, утыҙ етелә
"Тәрән тамырҙар" юк ителә...

Әкиәттәге серле курай һымак,
Әйт, был ниндәй канлы тантана?
Бер осондан һинең балың тамһа,
Бер осондан ниңә кан тама?..

III

Бала сағым - ҡолон сағым минең,
Был афәткә ниңә юлыҡтың?
"Халыҡ дошманы" тип ил улдарын -
Иң ҡаһарман халҡым батырҙарын -
Тарихтан мин ниңә йолоҡтом?
Сабый күңелемде, йәйғор һымаҡ,
Биҙәп торған тәүге йондоҙҙар -
Илтеүселәр еңеү байраҡтарын -
Ниңә минең кескәй бармаҡтарым,
Күҙегеҙҙе соҡоп, юйҙылар?
Кескәй йөрәгемә тик-шом һалып,
Ниңә аҡты ҡара тинеләр?
Тәү ятлаған шағир дуҫҡайҙарым -
Хөр халҡымдың тәүге Туҡайҙары -
Уларҙы һуң дошман инеләр?
Күҙҙе асҡан тәүге китаптарым,
Мең туғыҙ йөҙ утыҙ етелә -
Ниңә һеҙҙе, ҡулдан тартып алып,
Урта быуат уттарына һалып,
Яндырҙылар, һәләк иттеләр?
Ниңә шул саҡ, бер әүлиә булып,
Дөрөҫлекте илем белмәне?
Күреп ине тоғро улдарының
Лепинсылар булып үлгәнен,
Бирер ине илем үҙ йәнен!..

IY

Меӊ туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл!..
Меӊ туғыҙ йөҙ утыҙ етелә
Ҡан һуғарған, ут эсендә тыуған,
Сак-сак әле егермеһе тулған

Ярты баксабыҙ юк ителә,
Балта менән ҡырып кителә...
Яңы ҡыуаҡ калҡып, тын алмайса,
Егерменсе йыйын йыйылмайса,
Бикле ята беҙҙең куп эштәр, -
Әйтерһең дә, ут-гәрәсәт үтеп,
Урау юлдан тура юлға етеп,
Балкымаған ерҙә Бабичтәр!..
Әйтерһең дә, Туфан ҡалҡмаған,
Булмаған да һәҙиә, Юлтыйҙар!..
Юк, булмаған, тиеп, егерме йыл,
Меӊ ялғанды бергә тыҡҡыйҙар...
Әкиәттәге серле ҡурай һымаҡ,
Әйт, был ниндәй ҡанлы тантана?
Бер осондан һинеӊ балыӊ тамһа,
Бер осондан ниңә ҡан тама?..

Y

Шулай инә, тиҙәр, заманы...
Ә ҡайҙа һуӊ кеше иманы?
Ә бит куптәр, һатып иманын,
Ҡалҡан итте шул сак заманын.

Әкиәттәр хакты әйткәләй:
Күптән булған ерҙә әпкәләй.
Салауатты Һаткан Колойҙар
Һәр заманда сығып олойҙар.
Яңғыҙ ағас урман булалмай,
Һаңһыҙ балта урман кыралмай;
Балтаһынан бигерәк урманды
Кем һуң белмәй һабы кырғанды?
Хәҙер мәғлүм юха ялғаны
Утыҙ етелә ни кылғаны...
Улар мең туғыҙ йөҙ ун етелә,
Яктылыктан касты, өкөләй;
Ә мең туғыҙ йөҙ илле етелә
Эҙен юйҙы куҙҙән, төлкөләй...
Тик кырын эш кырк йылдан һуң да -
Кырк төҫкә кермә - белене:
Ил куҙенән эҙен юйғандың да
Ил каны бит тама еңенән!
Юк, был һуҙҙәр кон юллауҙан түгел,
Коно кайтырлыкмы был кандың?..
Иге йәшәр ләкин күреп торһон
Етмеш йәшәр ниҙәр кылғанды!
Бармак төртөп уға күрһәтмәйек,
Тик кылғаны, бүлеп йөкоһон,
Мең туғыҙ йөҙ утыҙ ете кабат
Ярты төндә ишек шакыһын!..

YI

Мең туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл!..
Ниңә хәҙер һинең яманат?
Юк, туйҙан һуң дөмбөр тағыу түгел,
Килер быуынға был - Аманат.

Биҙәмәйек беҙ ҙә үҙебеҙҙе,
Асылғас та алда бар томан, -
Ни мәғәнә хәҙер ул сактағы
Һуҡыр күҙгә һөрмә тартыуҙан?

Ул сакта ла беҙ бит тере инек,
Тик күтәргән инек Алланы.
Ә алланың - ҡайһы алланың һуң -
Дөрөҫ булғаны бар ялғаны?

Эй табыныу, һуҡыр табыныу һин,
Ни әшәке һинең ишенән?
Һәр әҙәмдә зиһен йоҡламаһа,
Ни көслө һуң ерҙә кешенән?

Беҙ бит донъя кыл өҫтөндә сакта,
Курсып уны ерҙә уттан-йоттан,
Еңеп сыктык аҙмы дошманды?
Бит үлемдән ерҙә юлып алып,
Ерҙә тәүге Ирек Юлын һалып,
Аткарҙык беҙ Тарих кушканды!

Бөтә йыһан беҙгә табынғанда,
Ниңә һуң беҙ уға табындык?
Гүйә беҙ юк инек!.. Ниңә шулай,
Ер аҫтына һеңеп аккан һыуҙай,
Хаклык өсөн һуңлап табылдык?..

Бер Аллаға барыһын япһармайык,
Бейемәйек кәбер өҫтөндә.
Хурламайык уға ышанғанды,
Тарих төҙәлмәй ул ес көндән.

Ышанғандың күҙен йылдар асыр,
Еңел түгел юлдар үтеүе,
Еңел түгел хатта бер өйрәнгән
Таякты ла ташлап китеүе...

Ә ул маяк ине! Ул киткәндә,
Аҙмы күҙ йәшебеҙ койолдо!
Күкрәктәрҙән йөрәктәрҙе үлем
Һурып алған һымак тойолдо.

Ләкин Тормош үҙе килеп тапты
Тарих ижадсыһы – халыкты.
Кулдан инде бер кем алмаҫ тартып
Корбан биреп алған хаклыкты –
Ленин васыят иткән Хаклыкты!

## УП

Мең тупыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл!..
Онотма һис уны һин, кешем.
Мең туғыҙ йөҙ Ун Етене һакла,
Мансылмаһын канға өмеше!

Ер күтәрмәҫ ауыр был вәхшәтте
Ил күтәрҙе, тәшкәс башына.
Килер быуындарға ғибрәт итеп,
Яҙ һин уны Тарих ташына.

Был вәхшәттә Тарих онотмаһын,
Онотмаһын тыуыр быуындар,
Ерҙә тағы берәй алла тыуһа,
Ул алланы ерҙән тыуһындар!
Был доньяла бер йыл окшамаһын
Утыҙ етенсе йыл ишегә,
Бер аллаға кеше табынмаһын,
Табынһын тик кеше кешегә:
Батшаларҙы йыққан кешегә,
Аллаларҙы йыққан кешегә,
Ай-йондоҙға баққан кешегә,
Урак-Сүкеш тотҡан кешегә!..

Сентябрь, 1964 йыл.
Дубулты – Өфө.